ТЕЛЕ БАРҘЫҢ — ИЛЕ БАР

# Йәнтөйәк

район-ара ижтимағи-сәйәси гәзите
25 октябрь, шаршамбы, 2023 йыл. № 20 (176)
Гәзит Бөрө ҡалаһы һәм районы, Асҡын, Ҡариҙел, Борай, Мишкә, Балтас райондарында таратыла
https://yantiyak.ru/
12+

**Афарин!**

# "Бала саҡтың хәүефһеҙ юлы"

## республика КВН конкурсының төбәк этабы Асҡында үтте

***Сара Уҡытыусы һәм остаз йылына һәм юл хәрәкәте йәш инспекторҙары отрядтары төҙөлөүҙең 50 йыллығына арналды һәм Асҡын район Мәҙәниәт йортонда гөрләп үтте. Унда Асҡын, Тәтешле, Ҡалтасы, Борай һәм Балтас райондарынан биш команда ҡатнашты. Шаяндар һәм отҡорҙар клубы конкурсында ҡатнашыусыларҙы Асҡын районы хакимиәте башлығы Динис Рәдис улы Йосопов сәләмләне һәм уңыштар теләне.***



*1-се урын яулаусы "Стопудово" командаһы.*

Йыл да үткәрелгән тематик сара юл-транспорт фажиғәләрендә балаларҙың йәрәхәт алыуын иҫкәртеүгә, уҡыусыларҙың юл йөрөү ҡағиҙәләрен дөрөҫ үтәүенә йүнәлтелгән. Үҙҙәренең юмор хисен, сәхнәлә артислыҡ һәм музыкаль һәләттәрен күрһәтергә Асҡындан "Стопудово", Тәтешленән "ВОМВА", Ҡалтасынан "Ҡалтасы юл саты", Борайҙан "Запас тәгәрмәс" һәм Балтас районынан "Шаяндар" командалары сыҡты. Уларға түбәндәге биремдәрҙе үтәргә кәрәк ине: "Тәҡдим ителгән хәрәкәт тиҙлеге — 50!" — ҡыҫҡа һәм күңелле итеп үҙ командаң менән таныштырыу; "Педагог — ул исем түгел, педагог булыу — һәләт" капитандар конкурсы — Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһы хеҙмәткәрҙәре һәм педагогтары тураһында; "Ә юл һоро таҫма булып һуҙыла" фристайлы — ЮХХДИ эшмәкәрлеге тураһында видеоролик күрһәтеү.

Командаларҙың һәр береһе биремдәргә яуаплы ҡарап, ныҡлы әҙерләнгән. Сәхнәлә егеттәр һәм ҡыҙҙар үҙҙәрен ышаныслы тотоп, бар осталыҡтарын асып, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен яҡшы белеүҙәрен күрһәтте. Төрлө темаға шаярыуҙар, шулай уҡ дәртле йырҙар һәм бейеүҙәр күп булды. Һәр сығышты тамашасылар алҡыштарға күмде, һәр команданы үҙенең көйөрмәндәре дәртләндереп торҙо.

Үҙҙәренең сығышы менән командалар тамашасыларҙы ғына түгел, жюри ағзаларын да хайран итергә тырышты. Ә жюри ағзалары — Асҡын районы хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр һәм кадрҙар сәйәсәте буйынса урынбаҫары Эльза Әхмәтгәрәеева, район мәғариф бүлеге етәксеһе Зөлфирә Селянина, Асҡын районы буйынса ЮХХДИ-ның юл-патруль хеҙмәте инспекторы, полиция лейтенанты Павел Крапивин, Иҫке Балтас 1-се урта мәктәбе директоры Рәзилә Әминова, Тәтешле районы Балалар ижады үҙәгенең педагог-ойоштороусыһы Миләүшә Хәбибуллина, Борай 2-се урта мәктәбенең уҡытыу-тәрбиә эше буйынса директор урынбаҫары Лилиә Фәйнетдинова, Ҡалтасы районы йәштәр комитеты рәйесе вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Роман Перелыгин конкурсҡа йомғаҡ яһағанда ҡатнашыусыларҙың шаярыу хисен, берҙәмлеген, сәхнә оҫталығын ғына түгел, иң мөһиме — юл йөрөү ҡағиҙәләрен яҡшы белеүен иҫәпкә алды.

Көсөргәнешле бәйгелә Асҡын 1-се урта мәктәбенең "Стопудово" командаһы лайыҡлы рәүештә 1-се урын яуланы. Улар республика конкурсының финалында сығыш яһаясаҡ. Ҡалтасы һәм Балтас райондары командалары асҡындарҙан аҙ ғына артта ҡалып, 2-се һәм 3-сө урындарға лайыҡ булды. Ә Тәтешле һәм Борай райондары командалары "Еңеүгә ынтылыш" номинацияһында билдәләнде.

Әүҙем, һәләтле, инициативалы егеттәр һәм ҡыҙҙар сираттағы тапҡыр КВН-дың күңелле, яҡшы, кәрәкле уйын икәнен иҫбат итте. Йәштәр юл йөрөү ҡағиҙәләрен үтәүҙең мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алып, уйындың асылын аса алды.

***Лениза ЗАКИРОВА.***

**Ҡыҫҡаса**

# Балалары яңы тыуған ата-әсәләргә ярҙамға

***Бала табыу йортонан балалар баҡсаһына тиклем – Дәүләт хеҙмәттәренең "Бала тыуыу" суперсервисы яңы тыуған бәпестең тәүге документтарын еңел һәм тиҙ генә эшләп алырға ярҙам итәсәк. Суперсервис үҙ эсенә: бала тыуыуын теркәү, даими һәм ваҡытлы прописка, СНИЛС һәм ИНН, ОМС полисы һәм поликлиникаға беркетелеү, балалар баҡсаһына сиратҡа ҡуйыуҙы ала.***

Суперсервис "Рәсәй Федерацияһының һанлы иҡтисади" милли проектының "Һанлы дәүләт идаралығы" федераль проекты ярҙамында эшләнгән. Унда бала тыуғанда кәрәк булған иң популяр социаль хеҙмәттәр ингән һәм дәүләт хеҙмәттәрен онлайн-режимда алыуҙы ябайлаштыра.

Билдәле булыуынса, 2023 йылда ата-әсәләр Дәүләт хеҙмәттәре аша миллион самаһы ғариза тапшырған. Тулыһынса онлайн килеш 140 меңдән ашыу бала теркәлгән. Йыл башынан сервис менән 14 йәшкә тиклемге балалары булған 230 мең ата-әсә файҙаланған.

Сервис бик уңайлы: уның ярҙамында бала тыуыу тураһында таныҡлыҡ алғас, ике ата-әсәнең дә Дәүләт хеҙмәттәрендә автоматик рәүештә СНИЛС, ИНН һәм медицина полисы алыуға һорау барлыҡҡа килә. Шулай уҡ суперсервис түләмдәр һәм ташламалар тураһында мәғлүмәт бирә. Әсәйҙең шәхси кабинетында әсәлек капиталы тураһында мәғлүмәт килеп сыға.

***Әлфиә МИНҒӘЛИЕВА.***

**Яңылыҡтар**

### Ишле ғаиләләр, был хаҡта онотмағыҙ!

Башҡортостанда ишле һәм инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләргә милеккә бушлай ер бүлеү урынына торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға бер тапҡыр аҡсалата түләү биреү тураһында ҡарар ҡабул ителгән. Уға ярашлы, аҡса күләме 250 мең һум тәшкил итә һәм исемләнгән таныҡлыҡ рәүешендә өс йылға тапшырыла. Уны фатир, бүлмә, шәхси торлаҡ йорт һатып алғанда иғәнә итеп файҙаланырға мөмкин. Шулай уҡ шәхси йорт һалырға, ипотека түләргә, ер участкаһы һатып алырға ла була. Республикала бындай ярҙамдан күп балалы һәм бәлиғ булмаған инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләр файҙалана ала.

### Башҡортостан илдә икенсе урында

Башҡортостан спорт объекттары һаны буйынса илдә икенсе урында. Был турала Премьер-министр Андрей Назаров социаль селтәрҙә хәбәр итә. Район һәм ҡалаларҙа 13 меңдән ашыу спорт объекты бар. Стадион, боҙ һарайы, физкультура-һауыҡтырыу комплексы, бассейн, спорт майҙансығы, фитнес-үҙәктәр төҙөлгән. "Спорт объекттары һаны буйынса Мәскәүҙән генә ҡалышабыҙ. «Башҡорт ихаталары» программаһы буйынса ғына һуңғы ике йылда 120-нән ашыу спорт майҙансығы төҙөлдө", — ти ул.

### Өҫтәмә ял бирергә тәҡдим итәләр

Рәсәйҙә тәмәке тартмаусы хеҙмәткәрҙәргә өҫтәмә ял бирергә тәҡдим итәләр. Думала ошондай тәҡдим әҙерләнгән, ул Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ҡарауына тапшырылған. Сәләмәт тормош алып барыусыларға ай һайын өҫтәп бер көн ял биреү башланғысы бар. Проект авторҙары фекеренсә, бындай сара уларға спорт менән шөғөлләнеү өсөн өҫтәмә мөмкинлек бирә, тәмәке тартыусылар өсөн иһә насар ғәҙәтен ташлауға тағы бер стимул була.

podpiska.ru

Һөйөнсө!

# Дәүләт ярҙамы дәрт бирә

## Нурия Ғилмаева — грант алыусы иң яҡшы 30 уҡытыусы исемлегендә

***Уҙҙаренең һөнәри байрамын билдәләгән көндә республиканың ауыл ерендә эшләүсе бер төркөм йәш уҡытыусыһы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡулынан гранттар алды. Урмияҙ урта мәктәбенең башланғыс кластар уҡытыусыһы Нурия Мөхәмәтнур ҡыҙы Ғилмаева ла төбәк ярҙамына эйә булды.***

2019 йылдың июлендә Радий Хәбиров йыл һайын ауыл ерендә йәшәүсе һәм эшләүсе 100 йәш уҡытыусыға 600 мең һум күләмендә грант тапшырырға ҡарар иткәйне. 2020 йылда грантты алыусылар һаны артты. Быйыл 150 сертификат тапшырылды, ә уның күләме 690 мең һум тәшкил итте. Конкурста 35 йәшкә тиклемге уҡытыусылар ҡатнаша ала. Уларҙың уҡытыу йөкләмәһе бер ставканан кәм булмаҫҡа, ә йәшәгән тораҡ пунктында иң күбе 15 мең кеше булырға тейеш.

Грант алыусы йәш, перспективалы ауыл педагогтары араһында беҙҙең райондан тағы ла өс уҡытыусы бар. Улар: Асҡын 2-се урта мәктәбенең инглиз теле уҡытыусыһы Алиса Рәшит ҡыҙы Вәлинурова, йәшәйеш хәүефһеҙлеге нигеҙҙәре һәм физкультура уҡытыусыһы Руслан Әлфир улы Яхин, башланғыс кластар уҡытыусыһы Мария Геннадьевна Чабина.



Был грантҡа дәғүә итеүселәрҙең эштәрен махсус комиссия баһалап, йыйған балдары буйынса рейтинг төҙөй. Премияға лайыҡ булыусы райондаштарыбыҙ араһынан Нурия Мөхәмәтнур ҡыҙы иң яҡшы 30 уҡытыусы исемлегенә 13-сө булып инеп, был төбәк ярҙамын Уҡытыусылар көнөндә Башҡортостан Башлығы ҡулынан тантаналы шарттарҙа алыуға лайыҡ була *(һүрәттә).*

Солтанбәк ауылында йәшәүсе Сәдидә һәм Мөхәмәтнур Миндейәровтарҙың алты балалы ғаиләһендә иң кесеһе булып донъяға килеп, теремек, тырыш, маҡсатсан ҡыҙ булып үҫә. Өфө 1-се педагогия училищеһын тамамлағас, Урмияҙ урта мәктәбендә башланғыс кластар уҡытыусыһы булып хеҙмәт юлын башлай. Йәш белгес ситтән тороп Башҡорт дәүләт педагогия университетында рус теле һәм әҙәбиәте факультетында белем ала. Мәктәп директорының тәрбиәүи эштәр буйынса урынбаҫары булып та бер йыл эшләп ала. Артабан башланғыс класс уҡыусыларын уҡыта.

Ғаиләһе менән дә бәхетле Нурия Мөхәмәтнур ҡыҙы. Тормош иптәше Рөстәм Әнүәр улы менән ул һәм ҡыҙ тәрбиәләйҙәр. Илназ улдарына — алты, Гүзәл ҡыҙҙарына өс йәш. Улар "Йәйғор" балалар баҡсаһына йөрөй. Йәш ғаилә өсөнсө балаларын көтә. Тырышып, хәләл көс менән яңы йорт һалғандар. Әле мейес һалып, йылылыҡ үткәргәндәр. Эске биҙәклəү эштәрен башҡарғас, өй туйларға йыйыналар. Нурия Мөхәмәтнур ҡыҙы дәүләт ярҙамына бик ҡыуанып, яңы өйгә ҙур бүләк булды, ти һәм йәш уҡытыусыларҙы шулай дәртләндергәндәре өсөн рәхмәт белдерә.

Сәләмәтлек

# Ҡаҙансылар күптән көтә ине

***"Һаулыҡ һаҡлау" милли проектының "Беренсел звеноны модернизациялау" төбәк программаһы ярҙамында Иҫке Ҡаҙансы ауылында ауыл табип амбулаторияһын күтәрәләр. Нефтекама ҡалаһынан ШЭ Р.Сәйфетдинов подряд ойошмаһы әле буласаҡ объекттың модуль конструкцияһын йыя. Улар шулай уҡ электр, сантехника йыһаздарын монтажлау буйынса эштәрҙе лә башҡарасаҡ.***

Амбулатория сафҡа индерелгәс, бирелә Иҫке Ҡаҙансы һәм яҡын тирәләге ауылдарҙан 2600 кеше беренсел медицина-санитар ярҙамы аласаҡ. Уларҙың 434-е — балалар, шул иҫәптән 14 бер йәшкә тиклемге сабый. Модуль тибындағы бинала балалар һәм ололар бүлексәһе, педиатр, терапевт, стоматолог, процедуралар, акушер кабинеттары һәм көндөҙгө стационар урын аласаҡ.

Бөгөн ауыл халҡын хеҙмәтләндергән амбулатория бинаһы 1973 йылда төҙөлә. Йылдар үтеп, ул бик иҫкерә һәм заман талаптарына яуап бирмәй башлай. Әле бирелә өс медицина хеҙмәткәре халыҡҡа ярҙам күрһәтә: фельдшер Ләйсән Рафиҡ ҡыҙы Ғафурьянова, акушер Лилиә Тәфкәлүн ҡыҙы Ғайсина, шәфҡәт туташы Зөбәржәт Хәмзә ҡыҙы Ғатина. Уларҙың барыһы ла тәжрибәле, үҙ эшенә яуаплы ҡараған һөнәрмәндәр. Йыйыштырыусы булып Раушания Рафиҡ ҡыҙы Зиннәтуллина эшләй.

— Заманса ауыл табип амбулаторияһы төҙөү халыҡҡа медицина ярҙамы күрһәтеү сифатын бермә-бер арттырасаҡ, яңы бинала педиатр һәм терапевт кабинеттары ла эшләйәсәк. Төпкөл ауылдарҙа йәшәгән кешеләр ваҡытында медицина ярҙамын аласаҡ, – ти 33 йыл акушер булып эшләүсе Лилиә Тәфкәлүн ҡыҙы.






## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

### Мәҙәниәт усағы яңы һулыш алды

Урындағы башланғыстарҙы яҡлау программаһы сиктәрендә капиталь ремонт үткәрелгән Степановка ауылы клубы тантаналы асылды. Проектты тормошҡа ашырыу өсөн 500 мең һум аҡса кәрәк була: 226 260 һум республика бюджетынан бүленә, шундай уҡ күләмдә — район бюджетынан, тағы ла 25-әр мең һум бағыусынан һәм ауыл халҡынан йыйыла. Ошо аҡсаға клуб бинаһының ишектәрен, тәҙрәләрен, электр үткәргестәрен алмаштыралар. Мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр сәйәсәте идаралығы тимер мейес алып ҡуя.

### Ремонт башланды

Музей урынлашҡан бинаның икенсе ҡатында "Альянс" идара итеүсе компанияһы яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте ремонт эштәрен башланы. Музей һәм галерея урынлашасаҡ был ҡатта тулыһынса ремонт талап ителә: стена, түшәм, тәҙрә, электр үткәргестәрҙе алмаштырыуҙан башлап, тыштан ҡыйыҡын һәм инеү урынына тиклем.

### Уңыштың бәрәкәте – ғөшөр саҙаҡаһында

Солтанбәк ауылы халҡы, баҡса эштәре тамамланғас, йыл дауамында үҫтерелгән уңыштарынан ғөшөр саҙаҡаһын быйыл да берҙәм генә йыйып тапшырҙы. Яңы ғына улар хәләл көс менән үҫтереп алған картуф, сөгөлдөр, кишер, кәбеҫтә, ташҡабаҡ һәм башҡа уңышынан, шулай уҡ һөт ризыҡтарынан өлөш сығарып, Өфө ҡалаһындағы "Туҡай" мәсетенә илтеп тапшырҙы.

*Наилә ИМАЕВА.*

podpiska.pochta.ru

Халыҡтар берҙәмлеге көнөн ҡаршылап

# Асау — дуҫ һәм берҙәм йәшәү өлгөһө

## Ауылда төрлө милләт кешеләре татыу йәшәй

***Асау ауылында удмурт, татар, башҡорт һәм рус милләтенән булған халыҡ күп йылдар үҙ-ара килешеп, татыу-берҙәм булып, бер-береһенең ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын хөрмәт итеп йәшәй.***

Милләт-ара дуҫлыҡты нығытыуҙа байрамдарҙың роле ҙур, сөнки улар аша халыҡтар бер-береһенең мәҙәниәтен, йәшәү рәүешен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын өйрәнә һәм шулар аша бер-береһенә хөрмәт тәрбиәләй, дуҫлыҡ ептәрен нығыта. Асау ауылында бындай саралар йыш үтә. Ҡайһы милләттең ниндәй генә байрамы булмаһын, айырма юҡ — татары ла, русы ла, удмурт һәм башҡорто ла әүҙем ҡатнаша. Һабантуй, Науруз, дини байрамдар, Пасха, Масленица һәм башҡалар бергә ҙурлап һәм гөрләп уҙа.

Ауыл клубында үткәрелә торған байрамдар ҙа милли биҙәктәргә бай. Сәхнәлә төрлө телдә моңдар яңғырай, һәр ҡайһыһы үҙенсәлекле һәм матур.

— Халыҡ беҙҙә ауыл өсөн йән атып йәшәй. Был хаҡта ғорурланып әйтә алам. Шулай бергә һәм берҙәм булғас, барлыҡ эштәрҙе лә ваҡытында һәм тейешле дәрәжәлә башҡарып сығабыҙ. Был берәй сарамы, өмә булһынмы. Ауылыбыҙҙың матурлығы һәм таҙалығы — барыбыҙҙың да ураҡ тырышлығы. Төрлө байрамдарға, өмәләргә күмәкләп сығабыҙ. Халыҡтың берҙәмлеге — үҙе бер ҡыуаныслы күренеш. Уртаҡ байрамдар, йолалар ауыл тормошон байыта, биҙәй. Улар төрлө быуын вәкилдәре араһындағы мөнәсәбәттәрҙең дә ныҡлығын күрһәтә, — ти ауыл клубының мәҙәни саралар ойоштороусыһы Гөлгөнә Хәмиҙуллина.



*Урындағы халыҡ милли асылына тоғро ҡала.*

Асау ауылы данлыҡлы кешеләргә бай. Советтар Союзы Геройы Үлмәҫ Шакиров иҫтәлегенә даими рәүештә төрлө тантаналы саралар үтә бирелә.

— Аяуһыҙ һуғыш яланында Үлмәҫ Шакиров күрһәткән батырлыҡ барыбыҙ өсөн дә үрнәк булып тора. Һуғыш йылдары көндән-көн йыраҡая барһа ла, яугирҙарыбыҙ күрһәткән батырлыҡтың әһәмиәте кәмемәй. Уларҙың ҡаһарманлығы, үткән тормош юлы үрнәгендә киләсәк быуындар ҙа тәрбиәләнер, — ти Асау ауылы халҡы үҙҙәренең батыр ауылдаштарын иҫкә алып.

Йәй айҙарында ғына Паралимпия уйындары чемпионы Рөстәм Ғарифуллин иҫтәлегенә бюст асылды. Рөстәм Рәфис улы 2005 йылда саңғы буйынса эстафетала "Донъя чемпионы" исеменә лайыҡ булды. 2006 йылда Туринда үткән Паралимпия уйындарында биатлон буйынса ике тапҡыр чемпион, эстафетала көмөш призер булды. Яҡташыбыҙ биатлон буйынса "Рәсәйҙең халыҡ-ара класлы спорт мастеры" (2005), "Рәсәйҙең атҡаҙанған спорт мастеры" (2006) тигән маҡтаулы исемдәргә эйә. 2002-2007 йылдарҙа Рәсәйҙең паралимпия йыйылма командаһы ағзаһы була. Спорт өлкәһендәге уңыштары өсөн "Салауат Юлаев" (2006) һәм "Дуҫлыҡ" (2008) ордендары менән бүләкләнгән районлашыбыҙ.

Ауылда яңы фельдшер-акушерлыҡ пункты ла асылды үткән йыл. Унда Гөлсимә Ғилемшина халыҡҡа 27 йыл медицина ярҙамы күрһәтә.

— Яңы пунктта барлыҡ мөмкинлектәр ҙә бар, йылы, яҡты, иркен. Бина заман талаптарына тулыһынса яуап бирә. Модулле яңы ФАП 315 кешене хеҙмәтләндерә. Уларҙың 46-һы — балалар. 90-ды уҙғандар — дүртәү, 60 йәштән өлкәнерәктәр 116 кеше иҫәпләнә, — ти Гөлсимә Рәдиф ҡыҙы.

Ҙур булмаған һәм матур тәбиғәт ҡосағында урынлашҡан Асау ауылында яҡшы күңелле, хеҙмәт һөйөүсән, тыуған еренең ҡәҙерен белеүсе, ата-баба йолаларын хөрмәт итеүсе төрлө милләт вәкилдәре бер ғаиләләй татыу йәшәй.

Үҙебеҙҙекеләрҙе ташламайбыҙ

# Сираттағы гуманитар ярҙам оҙатылды

***Ошо көндәрҙә махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы яҡташтарыбыҙ өсөн район үҙәгенән ҙур гуманитар ярҙам оҙатылды. Бының өсөн Иҫке Балтасҡа Өфөнән ике йөк машинаһы килде.***

Баш ҡаланан килгән йөк машиналарына өс "УАЗ" автомобиле, ғаз баллондары, редукторҙар, йылытҡыстар, генераторҙар, электр бысҡылары, төҙөлөш материалдары, маскировкалау селтәрҙәре, исемле посылкалар, эсер һыу һәм башҡа кәрәк-яраҡтар тултырылды. Посылкаларға уҡыусылар төшөргән һүрәттәр, яҙған хаттар ҙа һалынды. Гуманитар ярҙам йыйыуҙа барлыҡ район халҡы берҙәм булды.

— Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яҡташтар һораған әйберҙәрҙең барыһы ла тиерлек ебәрелде. Яугирҙар беҙҙең терәк-ярҙамды, күңел йылылыбыҙҙы һәр саҡ тойорға тейеш. Изге эштә ҡатнашҡан, битараф булмаған район халҡына ҙур рәхмәттәребеҙҙе еткерәбеҙ, — ти гуманитар ярҙам йыйыу пункты етәксеһе, район хакимиәтенең физик культура, спорт, йәштәр сәйәсәте бүлегенең балалар һәм йәштәр эше буйынса баш белгесе Гүзәл Мулләхмәтова.

Районыбыҙ кеше хәстәренә битараф булмаған, ҡайғыртыусан, һәр ваҡыт ярҙам итергә әҙер кешеләре менән данлыҡлы. Был бик ҡыуаныслы. Шулай берҙәм булып, ҡулыбыҙҙан килгәнсә ярҙам күрһәтәйек, яугирҙарыбыҙҙың иҫән-имен әйләнеп ҡайтыуын теләйек. Ир-егеттәребеҙгә ошо ярҙам менән тыуған яғыбыҙҙың сәләмдәре, йылылығы барып етһен ине.



## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

### Фестиваль старт алды

Район Мәҙәниәт һарайында үҙешмәкәр сәнғәт оҫталары Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығы уңайынан иғлан ителгән фестиваль сиктәрендә ҙур концерт программаһы менән сығыш яһаны. Илһөйәрлек менән һуғарылған сарала төрлө йәштәге 100-ҙән артыҡ кеше ҡатнашты. Улар тамашасыларға вокал, бейеү, нәфис һүҙ, сәхнә әҫәре жанрҙарындағы сығыштар тәҡдим итте. Район мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Дамир Хәмәтов фестиваль факелын Тушҡыр ауыл биләмәһе башлығы Булат Әғләмовҡа тапшырҙы.

### Конкурста еңделәр

Балтас район үҙәк китапханаһында 18 йәшкә тиклем физик мөмкинлектәре сикле граждандар араһында һайлау хоҡуғы һәм һайлау мәсьәләләре буйынса республика конкурсы сиктәрендә фәһемле сара уҙҙы. Интеллектуаль бәйге һөҙөмтәһендә 1-се урынға Фидан Ризуанов сыҡты, 2-се урынды — Рәмил Камалов, 3-сө урынды Рудаль Суфиянов алды.

### Сертификатҡа эйә булдылар

Республика Спорт министрлығы өлкән йәштәге кешеләргә физкультура-һауыҡтырыу хеҙмәттәре күрһәтеүсе ойошмаларға субсидия биреү проектын тормошҡа ашыра. Уға ярашлы, ГТО нормативтарын тапшырған 60 йәште уҙған граждандар физкультура-һауыҡтырыу хеҙмәттәре өсөн 10 мең һумлыҡ сертификат ала. Районда әлеге программа буйынса 20 кеше сертификатлы булды.

*Фирғәт НӘБИУЛЛИН.*

publicka.pochta.ru

Оҫта ҡулдар

# Һәр эше үҙенсәлекле, ҡабатланмаҫ

***Һуңғы йылдарҙа милли кейем тегеүселәр, милли биҙәүестәр яһаусылар һаны арта бара. Был, әлбиттә, һөйөндөрә, сөнки халҡыбыҙҙың ғөрөф-ғәҙәттәре һаҡланып, быуындан-быуынға күсә килә.***

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәүестәре тарихын өйрәнеп, береһенән-береһе матурыраҡ, сағыуыраҡ итеп һаҡал (селтәр, иҙеү) тегеүсе Флүзә Тимерғәли ҡыҙы Ғәзизованы районыбыҙҙа ғына түгел, унан ситтә лә яҡшы беләләр.

Флүзә Ғәзизова — Ҡырмыҫҡалы районы ҡыҙы. Борай районы егетенә кейәүгә сығып, бына 29 йыл Иҫке Ҡарағош ауылында йәшәй. Тормош иптәше Фәнис менән өс бала тәрбиәләп үҫтергәндәр, инде өс ейән-ейәнсәрҙәрен һөйөп ҡыуаналар.

Матурлыҡҡа ғашиҡ Флүзә апай ауыл китапханаһында эшләп, быйыл сентябрҙә хаҡлы ялға сыға. Хәҙер яратҡан шөғөләнә лә ваҡытын күберәк бүлә ала. Ул йөрәк йылыһын һалып, шәлдәр, косынкалар, кофта, шарф, күлдәктәр, ойоҡбаш-бейәләйҙәр бәйләй. Ҡул эштәре күҙҙең яуын ала, бәйләгән шәлдәре ҡойоп ҡуйғандай матур. Төрлө ҙурлыҡта, төрлө материалдарҙан, төрлө биҙәктәр менән тегелгән һаҡалдарын мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре лә, уҡытыусылар ҙа, ата-әсәләр ҙә ҙур теләк менән һатып ала. Милли рух бөркөлөп торған был биҙәүестәрҙе күргәҙмәләргә алып йөрөйҙәр, сәхнәнән сығыш яһағанда кейәләр.



*Флүзә Тимерғәли ҡыҙы эшләгән милли биҙәүестәрҙе гүзәл заттар теләп ала.*

Флүзә апай үҙе лә ауылда, районда, республикала уҙған сараларҙа әүҙем ҡатнаша, оҫталыҡ дәрестәре лә күрһәтә. Мәҫәлән, киң ҡолас һәм ҙур әҙерлек менән уҙған Бөтә донъя фольклориадаһында ҡул эштәренән күргәҙмә әҙерләй. Һаҡал һәм түбәтәй тегеү буйынса оҫталыҡ дәресе лә күрһәтә. Македония, Перу, Камерун, Палестина вәкилдәре ҙур теләк менән уның һаҡалдарын һатып ала. Ҡыҫҡаһы, ул теккән биҙәүестәр бөтә илгә тарала.

Флүзә Ғәзизова районда тормошҡа ашырылған “Етендән күлдәккә тиклем” тигән проектта ла ҡатнаша. Махсус станоктарҙа етен эшкәртергә, туҡырға өйрәнә, артабан үҙе лә башҡаларҙы өйрәтә. Тормош иптәше үҙенә лә шундай станок яһап бирә. Хәҙер был шөғөлдө лә үҙ итеп, үҙенсәлекле баластар, төрлө япмалар һуғырға ниәтләй оҫта.

“Милли кейем кейеп йөрөүемә генә түгел, ә үҙ ҡулдарым менән милли биҙәүестәрҙе эшләй алыуыма һөйөнәм! Был эшкә көндән-көн дәртләнеберәк тотонам”, — ти мал-тыуар ҡарарға ла, баҡса үҫтерергә лә, йәмәғәт эштәрендә ҡатнашырға ла, ейән-ейәнсәрҙәр ҡарашырға ла, шул уҡ ваҡытта халыҡ яратып алған милли биҙәүестәр тегергә, кейемдәр бәйләргә лә ваҡыт тапҡан бар эшкә лә оҫта гүзәл зат.

Хеҙмәт кешеһе

# Бешергән ризыҡтары телеңде йоторлоҡ

## “Эшебеҙгә иң ҙур баһа – балалар рәхмәте”, — ти тәжрибәле ашнаҡсы

***Борай 2-се гимназияһында балаларҙың дөрөҫ һәм сәләмәт туҡланыуын яҡшы ойоштороу белем биреү учреждениеһы эшмәкәрлегендә төп йүнәлеш булып тора, сөнки дөрөҫ туҡланыу сәләмәтлеккә генә түгел, ә белем алыуҙың сифатына ла йоғонто яһай. Бирелә үҙ эшенә яуаплы ҡараған, тәжрибәле ашнаҡсылар эшләй. Шуларҙың береһе — Золя Миңнуллина.***



“Ашнаҡсы – тәү ҡарашҡа, еңел, тыныс, таныш, тәмле һөнәр күренһә лә, ул түҙемлек, бөхтәлек һәм теүәллекте талап иткән ауыр эш. Бигерәк тә мәктәп ашнаҡсылары ҙур яуаплылыҡ тота. Туҡланыу һәр йәһәттән дөрөҫ, калориялы, витаминдарға бай һәм тәмле булырға тейеш. Һуңғы ваҡытта балаларҙың яҡшы сифатлы туҡланыуына дәүләт кимәлендә лә айырым иғтибар бүленә башланы: нормативтар билдәләнде, аш-һыуҙың сифатына контроль һәм ҡаты яуаплылыҡ булдырылды. Ата-әсәләр өсөн “Асыҡ ишектәр көнө” даими рәүештә ойошторола. Улар ашханаға килеп, әҙер ризыҡтарҙан ауыҙ итеп ҡарай, үҙҙәрен борсоған һорауҙарына яуап ала, — ти Золя Мирзахан ҡыҙы. — Һайлаған һөнәремде яратам, сөнки мин бала саҡтан аш-һыу әҙерләү менән мауыҡтым. Әсәйем өйҙә булмағанда, ашарға бешерҙем, ваҡыт үтеү менән ризыҡтарым тәмлерәк була барҙы. Элек Интернет булмағас, ҡыҙыҡлы рецептарҙы журналдарҙан, гәзиттәрҙән табып, уларҙы күсеп алып, дәфтәремә йәбештерә инем. Хәҙер Интернеттан йәнең теләгәнен табып, бешереп ҡарарға, оҫталыҡ дәрестәрен ҡарап та өйрәнергә мөмкин. Балаларҙың мин әҙерләгән ризыҡты яратып ашауын күреү – иң ҙур бүләк. Ошондай мәлдәрҙә арыу тураһында онотаһың, артабан эшләргә дәрт-дарман өҫтәлә”.

“Золяға аш-һыу әҙерләү һәләте Хоҙайҙан бирелгәндер. Ул һәр ризыҡты телеңде йоторлоҡ тәмле итеп әҙерләй, һәр башҡарған эшенә күңел йылыһын һала”, — ти аш-һыуға оҫта был мөләйем гүзәл зат тураһында хеҙмәттәштәре.

Әйткәндәй, Золя Мирзахан ҡыҙы — Салауат районының Торналы ауылынан. Мәктәпте тамамлағас, Саҡмағош һөнәрселек училищеһында ашнаҡсы һөнәрен үҙләштерә. Борай 2-се гимназияһында 2004 йылдан алып эшләй.

Золя Мирзахан ҡыҙы кеүек һөнәр оҫталары барҙа ата-әсәләргә лә, етәкселәргә лә һис кенә лә бошонорға урын юҡ, сөнки уҡыусылар һәр саҡ йылы аш, тәмле ризыҡ менән туҡланасаҡ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

### Шишмә төҙөкләндерелде

Районда «Ауыл биләмәләрен комплекслы үҫтереү» дәүләт программаһы йылдам тормошҡа ашырыла. Уның сиктәрендә Борай ауылындағы “Һалҡын шишмә”, уның биләмәһендәге майҙан төҙөкләндерелде һәм тантаналы асылды. Ҡунаҡтарҙың сығышы төҙөкләндереүгә ҙур өлөш индереүселәрҙе бүләкләү һәм йыр-бейеүҙәр менән үрелеп барҙы.

### Ярҙам күрһәтелде

Борай районы хакимиәте урындағы урман хужалығы менән берлектә «Вечер» ҡушаматлы яугирҙың ҡатыны Линара Зәйруллинаға бер йөк утын әҙерләп бирҙе. Ике бала әсәһе ярҙам һорап район хакимиәтенә ғариза биргән булған.

### Беҙҙекеләр һынатманы

Өфөләге «Динамо» стадионында Башҡортостан Республикаһының муниципаль һәм дәүләт хеҙмәткәрҙәре өсөн «Хеҙмәткә һәм оборонаға әҙер» Бөтә Рәсәй физкультура-спорт комплексы фестивале үтте. Унда район хакимиәте, ауыл биләмәләре һәм ауыл хужалығы идаралығы хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты. Командалар ултырып йәки терһәктәре менән өҫтәлгә терәлеп тороп атыу, арҡала ятып һәм ҡулдарға таянып кәүҙәне күтәреү, гимнастика эскәмйәһендә тороп алға эйелеү, 16 килограммлыҡ герҙе күтәреү, 2000 һәм 3000 метрға йүгереү буйынса ярыша. Беҙҙең спортсылар яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтеп, ГТО нормативтарын үтәне.

**Гөлназ ХАНОВА.**

podpiska.pochta.ru

Дан ғаиләләр

# Бәхет сере – татыулыҡта

## Алты балаға хәстәрлекле атай һәм әсәй булған Әхмәҙиевтар

***Әхмәҙиевтарҙың татыу ғаиләһе менән танышыуыбыҙға 20 йыллап. Бик үк яҡындан аралашмаһаҡ та, ата-әсәләрҙең класс һәм мәктәп йыйылыштарында йәш кенә әсәй менән атайҙың һәр ваҡыт бергә йөрөүе, ипле генә балалар тәрбиәләүҙә ҡатнашыуы һәр кемдең иғтибар үҙәгендә булды. Тора-бара класта йәки мәктәптә парталарҙы ремонтларға булһынмы, шкафтарҙы йүнәтергә кәрәкһенме, иң беренсе Андрей Вячеславович ярҙамға килер ине. Бына шулай һәр ергә өлгөр, тәрбиәле ғаилә беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа булды.***


*"Балаларыбыҙ бәләкәйҙән бер-береһенә терәк-таяныс булып үҫеүенә ҡыуанабыҙ", — ти хәстәрлекле ата-әсә.*

Андрейҙың бала сағы ла, мәктәп йылдары ла, студент тормошо ла Бөрө ҡалаһы менән бәйле. Бөрө дәүләт педагогия институты эргәһендәге лицейҙы тамамлаған, юғары уҡыу йортонон биология һәм химия факультетына уҡырға инә. Беренсе курстан һуң ғүмерлек тормош иптәше буласаҡ ҡыҙ – Евгенияны осрата. Ул да шул уҡ факультеттың икенсе курсы студенты була. Андрей — III, Евгения IV курсты тамамлағанда улар сәстәрен-сәскә бәйләй. Андрейҙың уҡып бөтөүенә тағы ла бер йыл ҡалғанда ҡыҙҙары Ксения тыуа. Бәхетле атай күп уйлап тормайынса, "Эльдорадо" магазинына һатыусы булып урынлашып, ситтән тороп уҡыу бүлегенә күсә. Был ваҡытта уҡыуға бер йыл алда барған Евгения ҡыҙыл дипломын ҡулына алған була.

Туйға тиклем үк Андрей биш баланан торған ҙур ғаилә тураһында хыяллана. Хоҙай уларға дүрт ҡыҙ, ике малай бирә. Уларҙың һәр береһен Андрей Вячеславович ҡыуанып ҡабул итә. Ҡатыны әйтеүенсә, ул бер ваҡытта ла малайҙар тураһында һүҙ ҡуҙғатмай. "Дүртенсе ҡыҙыбыҙ тыуғандан һуң иремдең нәҫелен дауам итерлек малайы булыуын теләнем. Бишенсе балабыҙҙың малай булырын белгәс, уға башҡа исем уйлай алманым. Шулай итеп, Андрейыбыҙ тыуҙы. Ике йылдан Хоҙай беҙгә Никитаны бирҙе", – ти бәхетле әсә.

Ғаилә башлығының һәр ваҡыт күңеленә оҡшаған эш менән шөғөлләнгәне килә. Шуға күрә ул мебель эшләү менән ҡыҙыҡһына башлай. Был эштең нескәлектәрен үҙләштереп, оҫта ҡуллы атай бына тигән йыһаздар яһай.

Ике ҡатлы шәхси йорттағы һәр әйбергә уның ҡул йылыһы тейгән. Нимәлер ремонтлағанда, йүнәткәндә ҡул араһына инеп барған малайҙар ҙа атай эргәһендә урала, ҡулдарынан килгәнсә ярҙам итергә тырыша. Шулай булмай ни, хәҙер инде Андрюша 2-се класта уҡый, балалар баҡсаһына йөрөгән Никитаға ла тиҙҙән алты йәш тула.

Ғөмүмән, ғаиләлә һәр эш бергә башҡарыла. Шәхси йортта баҡса эше лә етерлек, эт менән өс бесәй ҙә һәр ваҡыт иғтибар талап итә.

Ҡыҙҙар инде буй еткергән. Ксюша — Өфө фән һәм технологиялар университетының 2-се курс студенты. Инглиз телен тәрәндән өйрәнә. Киләсәктә тәржемәсе булырға хыяллана. Апаларының баш ҡаланан ялға ҡайтыуын бәләкәстәр түҙемһеҙләнеп көтөп ала. Анна лицейҙың 11-се класс уҡыусыһы, Анастасия — 7-се, Таисия иһә 5-се класта уҡый. Улар яҡшы өлгәшеүҙәре, өлгөлө тәртиптәре менән дә ата-әсәләрен ҡыуандырып тора.

Балаларҙың һәр береһенең ҡыҙыҡһыныуы иҫәпкә алына Әхмәҙиевтар ғаиләһендә. Аня менән Настя «Алена» цирк студияһында шөғөлләнә. Аня М. Бәширов исемендәге Бөрө балалар музыка мәктәбенең фортепиано класын тик яҡшы билдәләргә тамамлаған. Апаһы кеүек Таисия ла музыкаль мәктәптең 5-се класында фортепианола уйнау серҙәренә төшөнә. Малайҙар лего-конструкция менән ҡыҙыҡһына.

Андрей менән Евгения Әхмәҙиевтар балаларҙа яҡшылыҡ, мәрхәмәтлелек, эш һөйөүсәнлек, яңы белем алыуға ынтылыш тәрбиәләргә тырыша. Аҙна буйына эш менән мәшғүл булғас, атай кеше ял көндәрендә бар иғтибарын балаларына бүлә. Ә оҙайлы каникул ваҡыттарында бөтә ғаилә менән машинала сәйәхәт итеү традицияға ингән.

Бына шундай өлгө алырлыҡ татыу, күркәм ғаиләләр районыбыҙҙы биҙәй.

Үәт, исмаһам!

## Гигант бәшмәк тапҡан



Бөрө ҡалаһында йәшәүсе даланлы бәшмәксе 13-сө "Йондоҙсоҡ" балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләй. Светлана Сергеевна Байназованың сираттағы бәшмәккә барыуы уңышлы була. Бәшмәкселәр, ғәҙәттә, үҙҙәренең табышлы урындарын башҡаларға әйтмәүҙе хуп күрә. Светлана, күрәһең, шатлыҡтан, был мәғлүмәтте сер итеп һаҡлауҙы кәрәк тип тапмаған. Ҙур аҡ бәшмәкте (боровикты) ул Мишкә районы Сосновка ауылы эргәһендәге ҙур аҡланда таба. Тәүҙә ул үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай. Һәм, әлбиттә, бәшмәкте үлсәгәндәр. Мөғжизә — 940 грамм! Шулай итеп, бөтә ғаилә уны әҙерләүҙә һәм ашауҙа ҙур кинәнес һәм ләззәт таба.

**Әйткәндәй...**

*Бәләкәс балаларға бәшмәк ашатмағыҙ! Сөнки уларҙа әлегә был аҙыҡты эшкәртә торған ферменттар юҡ.

*Ҡарт бәшмәкте йыймағыҙ – унда токсиндар күп.

*Сүплектәге, юл буйындағыларын ашарға ярамай – тирә-яҡ мөхиттән зарарлы матдәләрҙе үҙенә йыйыу һәләтенә эйә.

*Бәшмәкте һаҡлауҙың иң еңел ысулы – бешереп туңдырыу. Шулай уҡ киптереп тә һаҡлауы уңайлы.

***Интернет материалын файҙаланып Миләүшә Сафина әҙерләне.***

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

**Яңы үҙәк асылды**

Бөрөлә «Троицкийҙа Арт-Ҡанат» исемле яңы мәҙәни–тарихи үҙәк асылды. XX быуат башында сауҙагәр Иван Мотыгин рәссамдарҙы, һөнәрселәрҙе, дизайнерҙарҙы һәм тирә-яҡ мөхитте өйрәнеүселәрҙе үҙ ҡанаты аҫтына йыйған. Ошо традицияны тергеҙеп, «Троицкийҙа Арт-Ҡанат» үҙәгендә славян яҙмаһының музей-оҫтаханаһы, сауҙагәр Иван Мотыгиндың музейы, Анна Воробьеваның — фото, Анастасия Витьконың «Шатлыҡ» театраль оҫтаханалары, Константин Воробьев менән фольклор кисәләре, Ләйлә Ҡадиҡованың «Мольбертовна» — рәсемдәр, Надежда Самойлованың — тегеү, Лира Шәмсетдинованың ҡул эше лавкалары асылды. Унда экскурсиялар, конференциялар, оҫталыҡ дәрестәре, фотосессиялар үтәсәк.

**Фестивалдә ҡатнашты**

Бөрө шағиры, Башҡортостан һәм Рәсәй яҙыусылары союзы ағзаһы Александр Хватков Якут ҡалаһында үткән «Благодать большого снега» VII халыҡ-ара әҙәби фестивалдә республикабыҙ исемен яҡланы. Өс көн буйына хәҙерге шиғриәттең классиктары менән бер командала эшләү, Саха Республикаһы Башлығы Айсен Николаевтың ихлас ҡабул итеүе, фестивалдең тантаналы асылыуы, «Сахамедиа» медиа-үҙәгендә үткәрелгән пресс-конференция, тере поэтик һүҙҙең яңғырауы көслө тәьсир иткән.

*Ғәлиә ҒӘНИЕВА.*

Матбуғат

# Почта бүлексәһе — улар иңендә



***Почта бүлексәләре матбуғатҡа яҙылыу кампанияһын ойоштороуҙа мөһим роль уйнай. Яңы Муллаҡай почта бүлексәһе хеҙмәткәрҙәре лә гәзит-журналдарға ташламалы хаҡҡа яҙылыу буйынса яңы ғына тамамланған ун көнлөк сиктәрендә ауылда йәшәүселәр менән тығыҙ бәйләнештә эшләне. Бирелә беҙҙә һәр саҡ ихлас йылмайып, алсаҡ йөҙ менән бүлексә етәксеһе Зилара Ғәлимхан ҡыҙы Йәнтүрәева ҡаршылай. Ул һәр клиент менән уртаҡ тел таба һәм көнүҙәк булған хеҙмәттәр тәҡдим итә.***

Зилара Ғәлимхан ҡыҙы почта начальнигы булып бирелә 36 йыл эшләй. Үҙ эшенә ҙур яуаплылыҡ менән ҡараған етәксенең намыҫлы хеҙмәте төрлө наградалар менән билдәләнгән. Уның аралашыусанлығы һәм иҫәпләүҙәрҙә һәр ваҡыт аныҡ эш итеүе ауылдаштарын һөйөндөрә.

— Үҙ эшемде яратам һәм ауылдаштарыма яҡшы мөнәсәбәттәре, ышаныстары өсөн рәхмәтлемен. Ташламалы хаҡҡа гәзит-журналдарға яҙылыу декадаһы сиктәрендә яратҡан баҫмаларына яҙылып ҡалырға тырыштылар, — ти Зилара Ғәлимхан ҡыҙы.

Зилара Йәнтүрәева етәкселегендә бына дүртенсе йыл инде почтальон булып Фәнүрә Сайфуллина эшләй. Ул күрше Солтанбәк ауылында тыуып үҫә. 18 йыл элек Яңы Муллаҡай ауылына ике улы менән күсеп килә. Шәхси хужалығында мал ҡарай, баҡса үҫтерә. Эшендә лә һынатмай, үҙ бурыстарын ҙур яуаплылыҡ менән башҡара.

Зилара Ғәлимхан ҡыҙы хәстәрлекле әсәй, бар эшкә лә оҫта хужабикә лә. Ике бала тәрбиәләп үҫтерә. Улар инде күптән үҙ тормоштары менән йәшәй. Шәхси хужалығы ла гөрләп тора: мал аҫрай, баҡса үҫтерә, теплицаһында ла ҡыяр-помидорҙары ишелеп уңа. Асыҡ йөҙлө, ҡунаҡсыл хужабикә ул, шуға күрә уның йортонан ҡунаҡ өҙөлмәй.

"Халыҡ менән берҙәм булып, бер-берендә аңлап, кәрәк саҡта ярҙам итеп эшләгәндә генә уңышҡа ирешеп була", — ти Зилара Ғәлимхан ҡыҙы.

*Нәзилә ӘХКӘМЕТДИНОВА.*
*Яңы Муллаҡай ауылы.*

2023 — Рәсәйҙә Уҡытыусы һәм остаз йылы

# Остаз өйрәтә, алға әйҙәй, ҡанат ҡуя

## Ҡариҙел уҡытыусылары мәртәбәле бәйгелә 3-сө урын яуланы

***Дыуан районының Мәсәғүт ауылында "Остаз" проектының өсөнсө уйыны үтте. Унда Салауат, Ҡыйғы, Дыуан, Мәсетле, Ҡариҙел районы командалары ҡатнашты. Командалар составында мәктәп директорҙары, туған тел буйынса методистар, башҡорт теле уҡытыусылары, башҡорт төркөмөндә эшләүсе тәрбиәселәр бар ине.***



*Ҡариҙел районының "Йәйғор" командаһы.*

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, май айында Башҡортостан мәғарифты үҫтереү институтының Милли мәғариф буйынса ресурс үҙәгенең башланғысы менән "Остаз" республика конкурсына старт бирелгәйне. Яңы бәйге Уҡытыусы һәм остаз йылына, республикала иғлан ителгән Атайсал өсөн изге ғәмәлдәр йылына арналған. Конкурс республика буйынса бер нисә төбәктә үткәрелеп килә, артабан еңеүселәр 14 декабрҙә билдәләнгән Башҡорт теле көнөндә финалда осрашасаҡ. Төньяҡ-көнсығыш райондар өсөн был сараны үткәреү урыны тип Дыуан районының Мәсәғүт ауылы тәғәйенләнде.

Һәр команда конкурсҡа ентекле әҙерләнгән.

— Был проект уҡытыусыларҙы туплау, уҡытыуҙың яңы методикалары менән таныштырыу, тәжрибә уртаҡлашыу кеүек изге маҡсаттарҙы күҙ уңында тотоп булдырылды. Конкурсты тотош республика буйынса ете төбәктә үткәреү ҡаралған. Ярыш барышында командалар үҙҙәре менән үҙенсәлекле итеп таныштырырға, уҡытыуҙың яңы алымдары, үҙҙәре ҡулланған заманса технологияларҙы күрһәтергә, милли мәғарифҡа, мәҙәниәт, әҙәбиәт өлкәләренә ҡағылышлы һорауҙарға яуап бирергә тейеш, — тип конкурс тураһында һөйләне Милли мәғариф буйынса ресурс үҙәге директоры Әлфиә Вәкил ҡыҙы Әбделмәнова.

Ҡариҙел районының "Йәйғор" командаһы районды ете башҡорт теле уҡытыусыһынан торҙо. Иҫке Аҡбүләк мәктәбенән — Тәфкиә Риф ҡыҙы Хажиева, Ҡариҙел ауылының 1-се мәктәбенән — Гөлнара Фаһаман ҡыҙы Якупова, 2-се мәктәбенән — Эльмира Йәмил ҡыҙы Дәүләтйәнова, Озерки мәктәбенән — Айгөл Финат ҡыҙы Дәүләтшина, Абыҙ мәктәбенән — Гөлнара Рәхмәт ҡыҙы Солтанова, Әртәкүл мәктәбенән — Гөлназ Нәғимулла ҡыҙы Лотфуллина, Ҡараяр мәктәбенән Рәйсә Тимерғәле ҡыҙы Солтанова конкурста көс һынашып ҡарарға теләк белдерҙе. Уларҙы район мәғариф бүлегенең туған телдәр буйынса методисы Зөлфинә Ваяс ҡыҙы Сафина туплап, аҡыллы фекерҙәр, идеялар, кәңәштәр менән дәртләндереп, һөнәри бәйгегә әҙерләнә.

*(Башы. Аҙағы 8-се биттә).*

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

### "Кроношпан" ярҙам итә

Яңы Бәрҙәш ауылы халҡы шатлыҡлы мәлдәр кисерә. Ағас эшкәртеүсе "Кроношпан" компанияһы тәҙәкләндереү буйынса ауылды шефлыҡҡа алғайны. Меценаттар балалар баҡсаһын, ФАПты тәҙәкләндереүҙә ҙур ярҙам күрһәткәйне инде. Әле бындағы фельдшер-акушерлыҡ пунктында стоматология кабинеты асылды, ул бай йыһаздар менән тәьмин ителде. Хәҙер ауыл халҡы ғына түгел, Кирҙәнән алып Ҡараяр ауылдарында йәшәүселәр ҙә бирелә хеҙмәтләндереләсәк. Ә был арауыҡта 1500 самаһы кеше йәшәй. Стоматология кабинетын тантаналы асыуҙа ҡатнашыусы район хакимиәте башлығы Айҙар Әнғәм улы Шәйҙуллин Яңы Бәрҙәш халҡына ауылда тиҙҙән яңы мәктәп буласағын белдерҙе.

### Ауыл урамдары яҡтыра

Әртәкүл, Байҡы, Ҡариҙел, Кирҙә, Магинск, Подлубов, Иҫке Аҡбүләк, Урғыш ауыл Советтары биләмәләренә ҡараған ауыл урамдарын яҡтыртыу буйынса әүҙем эш алып барыла. Подрядсы ойошма «РефСтройПроект» йәмғиәте 150 яҡтыртыусы лампа ҡуйырға планлаштыра. Тәү сиратта белем биреү усаҡтары урынлашҡан урамдарҙы яҡтыртыу ҡаралған.

### Абыҙҙа — һаулыҡ аллеяһы

Абыҙ ауылы халҡы "Айыҡ ауыл-2023" республика конкурсының муниципаль этабында ҡатнаша. Ошо айканлы улар төҙөлөп ятҡан мәсет янында "Һаулыҡ аллеяһы"н булдырырға ҡарар итте. Активистар ылыҫлы ағас үҫентеләрен ултыртты, уларҙы һаҡлау маҡсатында кәртәләп тә ҡуйҙы.

*Гөлнара СОЛТАНОВА.*

podpiska.pochta.ru

Ғаиләм — ҡәлғәм

# Ғаилә — ул яҙмыш бүләге

## Янағош ауылында йәшәүсе Бикбулатовтар шулай тип иҫәпләй

***Үҙенең бай тарихы, матур тәбиғәте, тырыш халҡы менән билдәле Янағош ауылына юл төшкәндә уңған, маҡсатсан Бикбулатовтар ғаиләһе менән танышырға тура килде. Ләйсән Фәрит ҡыҙына ниәтемде еткергәс, ул аптырап китте һәм үҙҙәренең ябай ғаилә икәнлектәре, ундайҙарҙың ауылда күп булыуы хаҡында әйтте. Эйе, эшһөйәр, тырыш ғаиләләр байтаҡ Янағошта һәм нәк улар арҡаһында ауыл йәшәй һәм үҫешә.***

Тормошта кешеләр осраҡлы ғына күрешмәй, бер-береһе менән яҙмышын бәйләр, шатлыҡтарҙы һәм ауырлыҡтарҙы бергәләп бүлер өсөн таныша һәм ҡауыша. 2001 йылдың ғинуарында 19 йәшлек Ләйсән дә Янағошҡа китапханасы булып эшкә килеп, Данир менән таныша. Ҡыҙ Өфө китапхана техникумында ситтән тороп уҡыған була. Районды бөтөнләй икенсе яғында урынлашҡан Терәкәй ауылында тыуып-үҫкән Ләйсән Янағошто ишетеп белһә лә, ҡайҙалығын күҙ алдына ла килтермәгән була. Шуға күрә, ят ергә килеп төшкәс, башта аптырап ҡала. Ләкин шул саҡ әкиәттәге кеүек бер егет килеп сыға һәм ярҙам ҡулы һуҙа — фатирға урынлашырға булыша, китапхананы күрһәтә, ауыл менән таныштыра. Был ваҡытта инде Данир Йоматау ауыл хужалығы техникумын тамамлап, колхозда иҡтисадсы булып эшләп йөрөй, бер ни тиклем тормош тәжрибәһе лә була. "Нимәһе менән үҙенә тартты был егет?" тигән һорауға, Ләйсән: "Ышаныслы булып күренде", — тип яуап ҡайтара. Уның өсөн һәр ваҡыт ата-әсәһе өлгө булып тора, ә Данирҙы атаһына оҡшата йәш ҡыҙ. Үҙе үҫкәндәге кеүек ныҡлы, татыу ғаилә ҡоророға теләй. Июлдә йәштәр сәстәрен-сәскә бәйләй. Өйләнешкәс, бер ни тиклем ата-әсәләре менән йәшәйҙәр. Йәш ғаиләгә бәхет өстәп, ҡыҙҙары Диләрә тыуа. Данир ишле ғаиләлә туғыҙынсы бала, тормош ҡанундары буйынса ата-әсәне ул ҡарарға тейеш була. Шуға улар төп йортта йәшәй, ә унан бер ваҡытта ла кеше өҙөлмәй.

Бер ни тиклем ваҡыттан һуң йәштәр айырым тормош ҡорорға уйлай. Донъя булғас, төрлөһө була. Бикбулатовтарҙың да ғүмер юлы шыма ғына бармай. Ауырлыҡтарҙы ҡулға-ҡул тотоношоп, бергә үтә улар. 2018 йылда ауылда ҙур, иркен өй барлыҡҡа килә — сәскәләр гөрләп үҫеп ултырған ҙур тәҙрәләре, яҡты, йылы бүлмәләре булған нәк шундай өй тураһында оҙаҡ йылдар хыяллана йәш ғаилә. Хыялды тормошҡа ашырыу өсөн ҙур тырышлыҡ һалырға тура килә. Сөнки 2005 йылда ғаилә башлығы эшен алмаштыра, педагог һөнәренә уҡып сығып, урындағы мәктәптә биологиянан уҡыусыларға белем бирә. Данир Хәниф улы үҙен яҡшы белгес итеп күрһәтә. Бала сактан хеҙмәткә һәм тәртипкә өйрәнеп үҫкән кеше булараҡ, ул ғаиләһенә генә түгел, башҡарған эшенә лә бар күңел йылыһын һала. Мәктәп баҡсаһы барлыҡ талаптарға тура килеп, гөрләп үҫә. Хеҙмәттәштәре Данир Хәниф улы тураһында тик маҡтау һүҙҙәре генә әйтә. 12 йыл эшләгәндән һуң яҙмыш йәнә һынай уны — ҡыҫҡартыуға эләгә. Төшөнкөлөккә бирелеп ултырмай ғаилә башлығы, йыраҡ Иркутск өлкәһенә вахта менән эшкә урынлаша. Ә ялға ҡайтҡан сағында өй мәшәкәттәре менән мәшғүл була — яңы һарай һәм мунса һала. Ир кеше төҙөгән һәр нәмәлә ҡатын-ҡыҙҙың да өлөшө ҙур. Һәр эште ир менән ҡатын кәңәшләшеп, уртаҡ уй-фекергә килеп башҡара.



*Ләйсән һәм Фәрит Бикбулатовтар.*

Ә Ләйсән Фәрит ҡыҙы китапханала эшләүен дауам итә. 2012 йылда китапхана моделлегә әйләнә. Бер нисә ай тормош иптәшенән башҡа йәшәүе ауыр булһа ла, өй мәшәкәттәрен дә, һөнәри бурыстарын да еренә еткереп башҡара. Мал да ҡарай, өйөн дә тәртиптә тота, оло йәштәге ата-әсәһенә лә ярҙамлашырға өлгөрә, ҡыҙы ла уҡыуҙағы уңыштары менән һөйөндөрә. Ә ғаилә башлығы һөйөклө ҡыҙы һәм тормош иптәше өсөн барын да эшләй. Бикбулатовтар ғаиләһендә иң мөһиме — ышаныс, бер-береңә ҡарата хөрмәт һәм һөйөү, асыҡ күңел, һәм тағы ла өйҙәге үҙ ҡулдарың менән тыуҙырған йылы һәм уңайлы мөхит.

— Данир — ышанысл таянысым, — ти Ләйсән. — Ҡыҙым менән улар — донъяла иң ҡәҙерле кешеләрем. Уларҙан башҡа тормошто күҙ алдына ла килтерә алмайым.

Үҙ сиратында, ғаилә башлығы ла иң яҡшы, иғтибарлы, һөйкөмлө ҡатын-ҡыҙ менән осраштырғаны өсөн яҙмышына рәхмәтле.

— Минең өсөн әсәйем — тормош, яҡшылыҡ, хәстәрлек менән бәйле бөтөн нәмә, ә атайым һәр яклап өлгө булып тора, — ти БДУ-ның 3-сө курсында белем алыусы ҡыҙҙары Диләрә.

Әсә менән ҡыҙ бер-береһенән айырылмаҫ әхирәттәргә оҡшаған. Татыу һәм берҙәм ғаиләлә башҡаса булыу мөмкин дә түгел.

Ләйсән Фәрит ҡыҙы ауыл тормошонда ҡайнап йәшәй, халыҡ иҫәбен алыуҙа ғына биш ҡабат ҡатнашҡан, һайлауҙарҙа башта комиссия ағзаһы булһа, инде рәйес вазифаһын башҡара.

Үҙенең хыялдары һәм пландары менән бүлешкеһе килмәне уның. Аңлашыла ла, был бик шәхсән. Ләкин тел төбөнән шуны аңланым, ҡалала йәшәп ҡарағыһы килә... Ерҙән айырылмаған, ҙур хужалыҡтан башҡаны күҙ алдына ла килтермәгән бөтмөр ханым киң күңелле кешеләр йәшәгән ожмах мөйөшөн таштан һәм асфальттан торған ҡала мөхитенә алмаштыра алыр инеме икән? Юҡтыр, тип уйлайым. Сөнки уларҙың донъяһы ҡаланыҡынан бер ҙә кәм түгел — Данир Хәниф улы ғаиләһе өсөн барлыҡ уңайлыҡтарҙы ла булдырған. Эйе, Янағош ауылы ла хәҙер Ләйсән Фәрит ҡыҙы өсөн иң яҡын һәм ҡәҙерле урынға әйләнгән.

Бикбулатовтар йәйен һәм көҙөн бергәләп тәбиғәт ҡосағына сыға, еләк, бәшмәк, сәтләүектәр йыйырға, балыҡҡа барырға ярата. Йәшелсә һәм картуф баҡсаһында ла һәр ваҡыт бергә эшләйҙәр. Уңған хужабикә ниндәй генә гөлдәр үстермәй йорт тирәһендә!

Был тырыш, татыу ғаиләнең бәхет сере ябай: яратырға, хөрмәт итергә белеү, кәрәк булһа, ғәфү итергә, яҡларға, һаҡларға, бергә эшләргә һәм йәшәргә. Тормошто яратып, уның бергә үткәргән һәр мизгелен ҡәҙерләп, үҙенең шатлыҡтары, хәстәрҙәре менән башҡаларға матур өлгө күрһәтеп, Янағошта бына шундай ябай ғаилә йәшәй.

Бикбулатовтар кеүек берҙәм парҙар һәр ваҡыт һоҡланыу уята. Улар өсөн иң мөһиме — балалар үҫтереү, уларҙы бәхетле итеү һәм балаларының үҫкәс, атаәсәһенән матур өлгө алып, ныклы, ышанысл ғаилә ҡороуы.

**Зәлиә ҒАТИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

### Күңелле осрашыу

"Күңел дауалаусылар" социаль-мәҙәни проекты сиктәрендә Мишкә үҙәк район дауаханаһы табиптары һәм хеҙмәткәрҙәре өсөн концерт ҡуйылды. Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы Рәмил Бәҙәмшин етәкләгән проект Башҡортостандың граждандлыҡ йәмғиәтенә булышлыҡ итеү фондының Башҡортостан Башлығы гранты ярҙамында тормошҡа ашырыла, маҡсаты – арт-терапия һәм мәҙәни реабилитация ярҙамында медиктарға эмоциональ яҡтан ярҙам итеү. Башҡортостандың халыҡ артисы Зөлфиә Ҡудашева дәртле бейеүҙәр бүләк итһә, талантлы эстрада йырсыһы Юлия Талхина һәм Рәмил Бәҙәмшин ҡанатлы һүҙҙәре, моңло йырҙары менән аҡ халатлыларҙың күңелен күтәрҙе, тырышып эшләргә илһам, көс-дәрт бирҙе. Тауыш операторы Азат Абдуллин ҡуйған дәртле көйҙәргә бейергә төштеләр, ҡушылып йырланылар, рәссам, арт-терапия белгесе Любовь Чистякова етәкселегендә һүрәт төшөрҙөләр.

### Экостанция асылды

"Юлсы" туризм, экскурсиялар һәм патриотик тәрбиә үҙәгендә Экостанция тантаналы асылды. Экостанция — ул белем биреүҙең яңы төрө, маҡсаты — өҫтәмә заманса программалар ярҙамында уҡыусыларҙың тәбиғи фәндәргә иғтибарын арттырыу, аграр һәм экологик профилле һөнәрҙәр һайларға этәргес биреү. Бирелә педагогтар Ольга Мәснәүиева һәм Ольга Яшпаева етәкселегендә "Биолаб" һәм "Экомониторинг" балалар берекмәләре эшләйәсәк.

*Яңылыҡтарҙы Фирҙәүес Ҡадиҡова әҙерләне.*

publiska.pochta.ru

**Илһөйәрлек**

# Шайморатовсы класы асылды

***Ҡариҙел ауылының 2-се урта мәктәбендә Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатов исемендәге класс асылды.***

Республикабыҙҙа Шайморатовсы кластарын асыу 2020 йылдан башланды. Уҡыусылар менән илһөйәрлек тәрбиәһенә айырым иғтибар бүлеү, Ватан өсөн ғорурланыу тойғоһо үҫтереү, илебеҙ тарихына хөрмәт уятыу – бындай кластарҙың маҡсаты. Класс етәксеһенән тыш, уларға хәрби куратор беркетелә, уҡыусылар араһынан командир тәғәйенләнә.

Шайморатовсылар класын асыу сараһында малайҙар һәм ҡыҙҙар тантаналы ант бирҙе һәм билдәле “Шайморатов генерал” йырын башҡарҙы.



*5-се А класы уҡыусылары “шайморатовсы”лар булды.*

Уҡыусыларға 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының хәрби байрағы күсермәһе тапшырылды. Бишенселәр алдында хәҙер Ватанды һаҡлаусылар традицияларын лайыҡлы кимәлдә дауам итеү бурысы тора.

Йәш "шайморатовсы"ларҙы мәктәп директоры Илдус Мәслүхәт улы Хәрипов, мәғариф бүлеге начальнигы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Наталья Александровна Столярова, “Һеләүһен” хәрби-патриотик клубының патриотик тәрбиә буйынса педагогы, Чечня һәм Афғанстан һуғыштарында, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы И. Ғафаров тәбрикләне.

Бишенселәр уҡыуҙа һынатмаҫ, киләсәктә илһөйәр, рухлы, илебеҙҙең лайыҡлы граждандары булып үҫер, тип өмөтләнәбеҙ.

***Эльза МОСТАФИНА, мәктәп директоры урынбаҫары.***

**Атайсал**

# “Нурулла” мәсете ауылға бәрәкәт өҫтәй

## Иҫке Ҡаҙансы мәсетендә Ҡөрьән ашы ойошторолдо

***Иҫке Ҡаҙансы ауылында аталары Советтар Союзы Геройы Нурулла Дәүләтгәрәй улы Сафиндың иҫтәлегенә мәсет төҙөп, уны һәр саҡ тәрбиәләп торған, быйыл капиталь ремонт үткәргән Зилә, Зәфәр, Булат, Риф Сафиндар иман йортона Ҡөрьән ашына ҡайтты.***

Мәсеттәр – Аллаһ Тәғәләнең ер өҫтөндә булған йорттары. Кем Аллаһты һөйә, ул уның мәсеттәрен дә һөйә. Аллаһ йортон һалырға ярҙам итеү, уны ҡарап, тәрбиәләп, ремонтлап тороу үҙеңә йәннәттә өй һалыуға тиң, тиҙәр. Шуға ла был мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырмайынса, күп кенә яҡташтарыбыҙ был сауаплы, изге эштә ҡатнаша.

Советтар Союзы Геройы Нурулла Дәүләтгәрәй улы Сафиндың балалары ауылда аталары иҫтәлегенә мәсет төҙөтөп, уны күп йылдар дауамында ҡарап, тәрбиәләп тора. Быйыл иһә капиталь ремонт үткәрә: тәҙрәләр евроға алмаштырыла, иҙәндәр яңыртыла, ҡоймалар буятыла. Ҡыҫҡаһы, мәсет тағы ла йәмләнеп, балҡып китә. Ошо уңайҙан иман йортонда Ҡөрьән ашы ойошторола.

Нурулла Дәүләтгәрәй улының балалары был дини сараға хәләл ефеттәре менән хөрмәтле ҡунаҡ булып ҡайта. Уларҙы Мәмдүнә Ғаян ҡыҙы етәкселегендә ағинәйҙәр мөнәжәттәр әйтеп, ҙурлап ҡаршы ала. Мәсеттең имам-хатибы Ғәбдрәхим хәҙрәт Сафин менән Булат Нурулла улы Ҡөрьән аяттары уҡый. Бергәләп мөнәжәттәр әйтәләр.

Нурулла Дәүләтгәрәй улының балалары хәйер-саҙаҡалар таратып, мәсет ремонтлауҙа ҡатнашҡандарға бүләктәр тапшырып, рәхмәттәр еткерә. Ә урындағы халыҡ, үҙ сиратында, Сафиндарҙың үҙҙәренә изге, сауаплы эштәре өсөн бик рәхмәтле. Инде күп йылдар “Нурулла” мәсете ауылға иман нурҙары таратып тора. Унда һәр саҡ дини саралар уҙып, ауылдаштарын иманлы, айыҡ, сәләмәт тормошҡа әйҙәй.

Нурулла Дәүләтгәрәй улының Яңауыл ауылында йәшәүсе Йәмилә туғаны ҡорбанлыҡ итенән былау бешереп алып килеп, барыһын да һыйлай. Шулай, мул табын артында, вәғәздәр тыңлап, ил-көндәребеҙҙең тыныс булыуын, яугирҙарыбыҙҙың иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуын теләп доғалар ҡылып, күңелдәрен сафландырып таралыша Ҡөрьән ашынан ҡаҙансылар.

***Наилә ИМАЕВА. Аҫҡын районы.***

# Остаз өйрәтә, алға әйҙәй, ҡанат ҡуя

*(Аҙағы. Башы 6-сы биттә).*

Уҡытыусылар командаһының имиджын тыуҙырыу өсөн зауыҡлы күлдәк тектереп алды, көн һайын тиерлек ватсап аша кәрәкле һүҙҙәр барланы, осрашыуҙарҙа оҫталыҡ дәресенә әҙерләнде. Конкурс өҫ кенә турҙан торһа ла, һәр береһе ныҡлы әҙерлекте талап итә ине.

"Атайсалға хеҙмәт итәм" исемле команда презентацияһына һәр район үҙенсәлекле сығыш тәҡдим итте. Сикле генә ваҡытта команданың имиджын асыу, һәр ҡатнашыусының һөнәри һәм шәхси потенциалын сағылдырыу бәйгеселәрҙән заманса ҡараш, ижади фекер талап итте. Ҡариҙелдәр ҙә мәртәбәле жюри алдында уҡытыусы һөнәре менән атайсалдарына тоғро хеҙмәт итеүҙәрен еңелсә юмор аша күрһәтә алды.

«Педагогик хазина» исемле икенсе турҙа педагогтар үҙҙәренең алдынғы эш тәжрибәһе менән бүлеште. Был конкурс этабында жюри бәйгеселәрҙең заманса эш алымын тәҡдим итеү оҫталығын, публикаға тәьҫир итеүен, ҡыҙыҡһындырыу уятыуын иҫәпкә алды. Был төңгәлдә "Йәйғор" командаһы Мифтахетдин Аҡмулла образына таянды, сәхнәгә лә мәшһүр сәсән-мәғрифәтсенең, атаҡлы һүҙ оҫтаһының арбаһы макетын алып сыҡты. Үҙҙәре ҡулланған метод-алымдарҙы күрһәтеп, педагогик хазиналарынан торған "китаптар" эшләп шул арбаға теҙҙе.

Өсөнсө турҙа командаларға башҡорт теле, мәҙәниәте, тарихы, методикаға бәйле һорауҙар тәҡдим ителде.

Шулай итеп, «Остаз» республика конкурсының төбәк этабы бер тында үтте. Жюри ағзалары командаларҙың сығышын иғтибар менән ҡарап, еңеүселәрҙе билдәләне.

Ҡыйғы районы командаһы — "Һөнәремә тоғро ҡалам", Салауат районы командаһы "Милли мәғарифтың ныҡлы ҡалҡаны" номинацияларында еңеүсе тип билдәләнде. Беҙҙең Ҡариҙел районы командаһы 3-сө урынға лайыҡ булды. 2-се урынды Дыуан районы командаһы яуланы. Еңеүсе тип Мәсетле районы командаһы табылды. Тап улар 14 декабрь – Башҡорт теле көнөндә финал уйынында ҡатнашыу хоҡуғын алды.

— Конкурста ҡатнашып, башҡаларҙы күреп, үҙебеҙҙе күрһәтеп, байтаҡ тәжрибә туплап, дәртләнеп, илһамланып ҡайттыҡ, — ти Ҡариҙел уҡытыусылары.

Был, ысынлап та, шулай. Юҡҡа ғынамы проектты ойоштороусылар "Остаз өйрәтә! Остаз алға әйҙәй! Остаз ҡанат ҡуя!" тип билдәләгән!

Ҡариҙел телһөйәрҙәре үҙҙәренә һәр яҡлап ярҙам иткән мәғариф бүлеге методистары Зөлфиә Ваяс ҡыҙы Сафинаға, Нариман Әҙғәм улы Хәйруллинға, водитель Филзәт Фәйзелғаян улы Талиповҡа, Байҡы мәктәбе башҡорт теле уҡытыусыһы Эльза Ғилфан ҡыҙы Нурмөхәмәтоваға оло рәхмәттәрен еткерә.

***Гөлнара СОЛТАНОВА. Ҡариҙел районы.***

**Екатеринбургта эш**

Автобустарҙа эшләргә талап ителә:

**“Д” категориялы водителдәр.** Эш хаҡы айға 100 000 һумдан.

**Кондукторҙар.** Эш хаҡы айға 50 000 һумдан.

Торлаҡ бирелә. Вахта ысулы менән мөмкин.

Телефондар: 89126274180, 89126274280.

(ОГРН 1069674091090. ООО "ТК "Авто Гамма").

*Реклама.*

Гәзит Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығы тарафынан 2016 йылдың 25 мартында бирелгән ПИ №ТУ 02-01519-сы таныҡлыҡ буйынса теркәлде.

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.

«Йәнтөйәк» район-ара ижтимағи-сәйәси гәзите.

Ойоштороусылар: Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, адресы: 450077,Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Киров урамы, 45 һәм Башҡортостан Республикаһының "Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһы, адресы: 450077, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙың 50 йыллығы урамы, 13.

Гәзит 2016 йылдың июленән айына ике тапҡыр — йома, 2022 йылдың ғинуарынан шаршамбы көндәрендә сыға.

Баш мөхәррир: Н.З. Имаева.

Тиражы – 438 дана. Күләме — 8 А3.
Индексы – ПО605 Хаҡы ирекле.

Нәшер итеүсе: Башҡортостан Республикаһының "Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһы, адресы: 450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, 4-се ҡат.

Телефондар:
баш мөхәррир – 2-18-50;
реклама бүлеге –2-20-60.
E-MAIL: Yantiyak@yandex.ru;
askino.bash@yandex.ru

Редакция адресы: 452880, Башҡортостан Республикаһы, Аҫҡын районы, Аҫҡын ауылы, Блюхер урамы, 10, 2-се ҡат.

Бөрө мәғлүмәт үҙәге — Башҡортостан Республикаһының "Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһы филиалында баҫылды.

(452450, Башҡортостан Республикаһы, Бөрө ҡалаһы, Ленин урамы, 56). Тел.: (8-347-84) 2-16-06.

Ҡул ҡуйыу ваҡыты –24 октябрь, 12.00. Ҡул ҡуйылды – 11.30.

Мәҡәләләрҙә килтерелгән факттарҙың дөрөҫлөгө өсөн уларҙың авторҙары яуаплы.

Редакция автор фекерен уртаҡлашмаһа ла, уның мәҡәләһен баҫа ала.

«Йәнтөйәк», № 20 (176), 2023.

106-сы заказ.

Редакцияның банк реквизиттары: р-с 40602810700210000001, БИК – 048073770, к.счет – 30101810600000000770, ИНН 0278066967
Филиал ПАО "БАНК УРАЛСИБ" в г. Уфа.

podpiska.pochta.ru